*Гөлшат ӘХМӘТҠУЖИНА*

# ОПЕРА — ОЛО СӘХНӘ...

Яңауыл районы Исхаҡ ауылында хәҙер утыҙлап ҡына кеше йәшәй, улары ла ҡарт-ҡоро. Беүә йылғаһы буйында, матур тәбиғәт ҡосағында ултырған ошо бәләкәй генә ауылда тыуған Фәнәүи. Ғаиләлә дүртенсе малай ул. Ә Сәлиховтар ғаиләһендә бөтәһе һигеҙ малай үҫә.

— Әсәйем менән атайым гел эштә булдылар, әсәй һауынсы ине, һис ваҡыты юҡ. Өйҙәге бөтә эш беҙҙең елкәлә, ҡыҙҙар юҡ бит инде. Шуғалырмы, мин ашһыуға ла оҫта, — тип көлә бөгөн Башҡортостандың атҡаҙанған артисы, Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры солисы Фәнәүи Сәлихов. — Ҡоймаҡ ҡоя, сәк-сәк бешерә беләм...



Йырсы гөлдәр үҫтерергә лә ярата: өйөндә утыҙҙан ашыу төрлө гөл үҫә. Тәбиғәт ҡосағына сыға алмаған, йә ауылын юҡһынған мәлдәрҙә ул ошо гөлдәр менән булыша. Эреле-ваҡлы сәскәләр йырсыға тыуған яҡ болондарын, бала сағын, әсәһе Нәфисә апайҙың моңло йырҙарын хәтерләтә.

— Әсәйемде йоҡлар алдынан йырлата торғайным, тыңлап ятам-ятам да әкренләп өн менән төш бутала башлай, унан йоҡлап китәм. Атайым бик иртә үлеп ҡалды, бөтә тормош йөгө, беҙҙе тәрбиәләп үҫтереү, уҡытыу әсәйем елкәһенә төштө. Шуға ла беҙ иртә өлкәнәйҙек, әсәйгә булышырға тырыштыҡ. Йәйҙәрен көтөү көтәм, үҙем йырлап йөрөйөм. Йыш ҡына сәғәткә ҡарап йырлайым, артистар һымаҡ булдыра аламмы, йәнәһе.

Мәктәпте тамамлағас, Фәнәүи бер йыл Ҡаҙағстанда эшләп ҡайта, армияла хеҙмәт итә, унан Нефтекама ҡалаһына эшкә китә. Бында ул Төҙөүселәр клубында эшләп килгән үҙешмәкәр түңәрәккә йөрөй, баянсы Риза Зыяҡаев менән йыш ҡына сығыш яһайҙар (хәҙер Р. Зыяҡаев ошо уҡ ҡалала филармония директоры). Сәнғәткә, йыр-моңға булған мөхәббәте егетте Өфө сәнғәт училищеһының йыр бүлегенә алып килә. Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре Фәрзәнә Сәғитова класында уҡый ул. Артабан сәнғәт институтында профессор Рәйсә Ғәлимуллинала йырлау оҫталығын камиллаштыра. Профессор үҙенең уҡыусыларын классика йүнәлешендә тәрбиәләй. Танылған опера йырсылары Әлфиә Хамбалеева, Галина Бутолина, Светлана Арғынбаева, Наталья Голова, Эльвира Фәтиховалар Р.Ғәлимуллинала белем алған. Әле Светлана контракт буйынса Италияла, ә Эльвира Төркиәлә эшләп йөрөйҙәр.

Институтты тамамлағандан һуң Фәнәүи алдында шундай һорау тыуа: ҡайһы юлды һайларға? Лирик тенор тауышлы йырсыны Башҡорт опера һәм балет театрына ла, филармонияға ла эшкә саҡыралар. Эстрада йырҙарын да, классик әҫәрҙәрҙе лә берҙәй камил, яратып башҡара ул. Шулай ҙа бер йыл филармонияла эшләп ала Фәнәүи. Профессор Наталья Дмитриевна Шпиллер уны һаман опера йыр-



*Вердиҙың «Риголетто» операһынан күренеш. Герцог ролендә Ф. Сәлихов, Джильда — Эльвира Фәтихова*

сыһы булырға өгөтләй. «Операнан эстрадаға күсеүе бер ҡасан да һуң түгел, ә бына эстраданан операға күсеп булмай, — ти ул. — Тауыш — ул хоҙай биргән байлыҡ, ә байлыҡты әрәмшәрәм итергә ярамай». Милли спектаклдәрҙә уйнарлыҡ опера йырсыһы ла булмай ул саҡта. Бына шулай Фәнәүи опера һәм балет театрына эшкә килә. Бында эшләү дәүерендә ул 30-ҙан ашыу образ ижад итте. Д. Вердиҙың «Риголетто»һында герцог партияһын башҡарып, был операла уйнаған беренсе башҡорт йырсыһы була Ф.Сәлихов. Был роль уның өсөн вокаль яҡтан үҙен күрһәтеү ҙә булды.

Элек гастролгә тик балет спектаклдәре менән генә сығалар ине, ә «Риголетто» операһы менән театр Төркиәгә барҙы. Артист өсөн һәр сәйәхәт өр-яңы тәьҫораттар, хис-тойғо сығанағы булып тора. Һуңынан хатта өйрәнеп бөткән сәхнә лә икенсерәк булып күренә, яңыса эшләү теләге уяна. Ҡыҫҡаһы, эленән-әле гастролгә сығыу ижад өсөн бик тә файҙалы, тип иҫәпләй Фәнәүи. Элек Башҡорт опера һәм балет театры артистары алыҫ ҡалаларға, әйтәйек, Владивосток, Севастополь яҡтарына ла барып етә ине. Хәҙер донъялар үҙгәрҙе, ҡунаҡханалар бик ҡиммәт, юл хаҡтары ла күтәрелгәндән-күтәрелә, мөмкинлектәр сикләнде.

Фәнәүи «Салауат Юлаев» операһында Салауат арияһы менән сыҡҡас, әлбиттә, күптәр уны эстән генә Мәғәфүр Хисмәтуллин менән йәнәш ҡуйып ҡарағандарҙыр. Бөйөк йырсыбыҙ беҙгә яугир, ҡыйыу һуғышсы, үткер юлбашсы образын асһа, Ф. Сәлихов башҡарыуында милли батырыбыҙ бөтөнләй икенсе юҫыҡта асыла: ул ер-һыуына ғашиҡ шағир, йөрәген мөхәббәт телгеләгән йәш ир-егет... Бизеның «Мәрйен эҙләүселәр» операһындағы Надир йырсы күңеленә айырыуса яҡын образ булғандыр моғайын. Ә Салауат Низаметдиновтың «Ай тотолған төндә»һендәге Диуана! Ниндәй тулы ҡанлы, тетрәткес образ... Йырсы Диуана партияһын күңелдәргә үтеп инерлек итеп, киң диапазонлы тауышын тулыһынса геройҙың характерын асыуға һалып башҡарҙы һәм тамашасылар хәтерендә ҡалды. Опера һәм балет театрында йылына бер нисә спектакль ҡуйыла һәм һәр ҡайһыһында тиерлек Фәнәүи Сәлиховтың күкрәктән гөрләп сыҡҡан тенор тауышы өсөн роль табыла. Уҙған йыл Заһир Исмәғилевтың «Ҡаһым түрә» операһында Ҡаһым, ә Салауат Низаметдиновтың «Мементо»һында Мастер ярҙамсыһы партияларын башҡарырға тура килде уға. Әлбиттә, йырсы Ҡаһымды бер яҡлы ғына итеп күрергә теләмәй, сөнки ул яугир ғына түгел, шиғри күңелле кеше, ҡурайсы, йырсы ла.

Йыш ҡына Фәнәүигә: һин ниндәй мәктәп үттең? Тауышың, башҡарыу манераң беҙҙең мәктәпкә оҡшамаған, — ти торғайнылар. Тәүҙәрәк йырсы был һорауға үҙе лә аптырап ҡала ине. Һуңынан шул асыҡланды: бәхтиһәң, уның уҡытыусыһы Рәйсә Ғәлимуллина Италия йырсыһы Мазеттиҙа белем алған икән. Ә был иһә Ф. Сәлиховтың ижадына йоғонто яһамай ҡалмаған... Бына ул Надир арияһын башҡара. Күҙ алдына азат рухлы, уй-хыялы менән йыһан байҡаған, йәне-тәне менән сәйәхәткә, яңы ер-һыуҙарҙы күрергә ынтылған йәш кеше килеп баҫа. Уның иркен, йөрәктең иң нескә ҡылдарына сиртерҙәй көслө тауышы тетрәндерә, шул уҡ ваҡытта йыраҡ юл-сәфәргә, яңы мажараларға әйҙәй. Йәки бына Рәми Ғариповтың «Башҡортостан» шағирына Нәзир Әбдиев яҙған романсты башҡарғанда күк Уралдың мөһабәт үркәстәрен, мең төҫ-биҙәккә мансылған битләүҙәрен, тыуған яҡтың икһеҙ-сикһеҙ йәйрәп ятҡан болонҡырҙарын, сылтыр шишмәләрен, гөрләп аҡҡан шарлауыҡтарын, уйсан йылға-күлдәрен күҙ алдына баҫтырып, йырсының ҡеүәтле тауышы зәңгәр күктәргә олғаша.

Йырсы классика менән генә сикләнмәй, йыш ҡына эстрадаға ла мө-



*«Яңы йылды ғаилә менән ҡаршылайбыҙ» — ти Илфирә ханым*

рәжәғәт итә. Айырыуса Роза Сәхәүетдинованың йырҙарын ярата, композиторҙың көйҙәре, нисектер, уның тауышына тура килеп торған кеүек. Ф. Сәлиховтың репертуарында Абрар Ғабдрахманов, Заһир Исмәғилев, Ғәзиз Дәүләтбирҙин, Шамил Ҡолбарисовтың әҫәрҙәре байтаҡ, һәүәҫкәр композиторҙар ҙа уға йырҙарын тәҡдим итә.

— Күңел һалмағыраҡ, халыҡсаныраҡ йырҙарға тартыла, — ти Фәнәүи. — «Яутүбә» тигән башҡорт халыҡ йырын бигерәк яратып башҡарам. Уны ҡасандыр ҡурайсы Ишморат Илбәковтың атаһы уйнаған. Үҫәргәндәр йыры.

«Үҫәргәндең данлы тарихтарын
Һаҡлап килә башҡорт ҡурайы...»

Әйткәндәй, был йырҙы әлегә башҡа бер йырсы ла башҡарғаны юҡ.

Фәнәүи Сәлихов бер нисә мәртәбә төрлө конкурстарҙа лауреат исемен яуланы. Ә 1994 йылда уға «Башҡортостандың атҡаҙанған артисы» тигән абруйлы исем бирелде. Бишенсе йыл инде ул Өфө сәнғәт училищеһында дәрестәр алып бара.

— Талант тәжрибә аша асыла, — ти Фәнәүи. — Шуға күрә белгестәрҙе 60 йәшкә еткәне өсөн генә эштән ебәреү дөрөҫ түгел. Киреһенсә, был ваҡытта уның өр-яңы һәләте, мөмкинлектәре асыла башлай.

Бер ваҡыт танылған композиторҙарыбыҙҙың береһе уға: «Һин Италия, Чехия сәхнәләрендә йырлай торған йырсы, Фәнәүи. Бында ятырға ярамай», — ти. Ошо һөйләшеүҙән һуң Фәнәүи үҙен ситкә сығып киткән йырсылар урынына ҡуйып ҡарай ҙа... үҙенең бер ваҡытта ла ошо ергә, тәү ҡат тәпәй баҫҡан изге тупраҡҡа хыянат итә алмаясағын аңлай. Әлбиттә, һәр ҡайһыбыҙҙағы кеүек, уның да әсенгән мәлдәре аҙ булмағандыр. «Ғүмер буйы финанс йәһәттән азат булмау ҡамасаулай, — тип бошона ул бәғзе мәлдәрҙә. — Азат рухлы булһаҡ, ижад та яңы бейеклектәргә күтәрелер, халыҡтың мәҙәниәте лә, сәнғәт тә яңы үҫеш алыр ине». Азат рухлы булыу өсөн, моғайын, ижад кешеһе матди мохтажлыҡ кисермәҫкә тейештер. Ситтә опера йырсыһы бер генә партия өсөн ғүмеренә етерлек (әлбиттә, беҙҙең ихтыяждарҙан сығып) гонорар алһа, беҙҙә ул бер айҙан икенсеһенә аҡсаһын иҫәпләп йөрөргә мәжбүр. Һәм, ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, был йырсыларға ғына ҡағылмай...

— Мин бәхетлемен, — тип йылмая Фәнәүи. — Иң мөһиме, ҡатынымдан уңдым. Илфирә мине аңлап тора, һәр саҡ ярҙам итергә әҙер. Арып ҡайтҡанымда йылмайып ҡаршы ала, һөйөп оҙатып ҡала.

Балалар баҡсаһы тәрбиәсеһе Илфирә ханымдың ҡулынан килмәгән эш юҡ: тәмле бешерә, матур итеп тегә. Ҡыҙҙары Ләйсән — туғыҙынсыла, улдары Алмас етенселә уҡып йөрөй. Ижад кешеһе өсөн ғаиләнең бөтөн,татыу булыуы ла мөһим, күңелең тыныс булһа, эшең дә алға бара.

Фәнәүи Сәлиховтың артылаһы үрҙәре алда әле. Шуныһы ҡыуаныслы, ул тәбиғәт биргән талантын һәр яҡлап асырға, тулы ҡанлы тормош менән йәшәргә тырыша. Билдәле булыуынса, Актерҙар йортонда Миһырбанлыҡ театры эшләп килә, унда Раиса Устинова матур-матур спектаклдәр ҡуя. Фәнәүи шул спектаклдәрҙә ҡатнашырға ла ваҡыт таба. Яңы эстрада йырҙарын да әүҙем өйрәнә, халыҡ ижадына ла йыш мөрәжәғәт итә. Ә ваҡыт иһә һәр саҡ ҡыҫынҡы, театрҙа бер партияны башҡарыу өсөн 500-әр битлек текст ятларға тура килә. Спектаклдә үҙ роленде мотлаҡ башҡа йырсыларҙың роленә бәйләп алып барырға кәрәк, шунһыҙ образды асыу мөмкин дә түгел.

Фәнәүи Сәлихов даими эҙләнеү өҫтөндә. Әле ул беҙҙе яңынан-яңы спектаклдәре, йырҙары менән ҡыуандырыр, тип ышанаһы килә. Йырсының ижад шишмәһе ярҙарын киңәйтә генә әле...